**Батыр яугир**

Быйыл 9 Майҙа Бөйөк Еңеүҙең 75 йылын билдәләйәсәкбеҙ. Бөйөк Ватан һуғышында минең ҡарт ҡартатайым да, олатайым да ҡатнашҡан. Ул турала миңә атайым һөйләне. Ҡарт ҡартатайым, Мөхәмәтйәнов Хажеғәле Ғайса улы, 1906 йылда Ейәнсура районы Байыш ауылында тыуған. 1924 йылда Ҡыҙыл Армия сафына хәрби хеҙмәткә алына. Хажеғәле Ғайса улы 3 йыл армияла хеҙмәт итә. Армиянан ҡайтҡас, колхозда төрлө эштәрҙә эшләй. Нимәгә генә тотонһа ла уның ҡулынан килә. Ҡарт ҡартатайым оҫта ҡуллы була. Кешеләргә биҙәкле саналар, арбалар, тәгәрмәстәр, умарталар һәм умартаға кәрәк- ераҡтарын, тәҙрә рамдары ла эшләй. Тирә-яҡта дан тотҡан һунарсы ла, балыҡсы ла, умартасы ла булған. Беҙҙең ауылда уның тереләй тотоп алып ҡайтҡан йәнлектәрен айыу, бүре, һеләүһендәрен һәм башҡаларын әле лә кешеләр иҫтәре китеп һөйләйҙәр.

1941 йылдың 22 июне... Һуғыш башлана. Ҡарт ҡартатайым шунда уҡ военкоматҡа китә. Тик ул 1941 йылдың ноябрь айында ғына фронтҡа китә. Һуғыштың тәүге көндәре беҙҙең ил өсөн бик ауыр була. Дошман Мәскәүгә яҡынлаша. Ил өсөн иң ауыр мәлдә Башҡортостанда 112-се башҡорт атлы дивизияһы төҙөлә. Хажеғәле ҡартайымды башҡорт кавалерия дивизияһына ебәрәләр. 112-се атлы дивизияға эләгеүенә ул бик шатланған. Сөнки ҡартатайым аттарҙы ныҡ яратҡан була. Хажеғәле ҡартатайым батыр, шаян кавалерист була. Ул вестовой (хат ташыусы) булып хеҙмәт иткән. Бындай яуаплы эште тик ышаныслы, батыр кешеләргә генә тапшырғандар. Был бөтәһенә лә эләкмәй. Хажеғәле Ғайса улы ғорурлана торған булған. Шайморатов генерал тураһында ҡарт ҡартатайым:

- Һай, батыр ир ине Шайморатов. Уның күҙенә генә ҡарап тора торғайныҡ. Ябай һалдатты яратты, мәғәнәһеҙ үлемдән һаҡларға тырышты. Тик беҙ генә уны һаҡлап ҡала алманыҡ. Әммә беҙ уны бер ҡасан да онотманыҡ. Яратҡан командирыбыҙ өсөн фашистарҙан үс алдыҡ,- тип һөйләгән атайыма.

Ҡарт ҡартатайым атта оҫта йөрөгән, мәргән атҡан. Хажеғәле Ғайса улы Сталинград, Курск дуғаһындағы һуғыштарҙа ҡатнаша.



Белоруссияны, Польшаны азат итә. Берлин операцияһында ҡатнаша. Гвардия ҡыҙыլармеецы Мөхәмәтйәнов Хажеғәле Ғайса улы Еңеүҙе Берлинда ҡаршылай. “Варшаваны азат иткән өсөн”, “Хәрби хеҙмәттәре өсөн”, “Берлинды азат иткән өсөн” миҙалдары менән наградлана. Һуғыштан ҡайтҡас та уны Мәжит Ғафури исемендәге колхозға рәйес итеп ҡуялар. Һалдат ҡайҙа ла һалдат инде. Көндө төнгә ялғап эшләй, колхозды алдынғылар рәтенә сығара.

Хажеғәле Ғайса улын шаян, батыр, йор һүҙле була. Ул оҫта бейеүсе лә булған. Бөйөк яугир ҡартатайымдың батырлығын, изгелеген мәңге оноторлоҡ түгел. Беҙ уның менән ғорурланабыҙ. Хәҙерге көндә лә

ҡартатайым йәшәгән урам мәңгеләштерелгән "Мөхәмәтйәнов " тар исемен йөрөтә.

Эйе, минең тоҡомом - яугирҙәр тоҡомо. Ир- егеттең изге бурысы- тыуған илде һаҡлау.  Атайым әйтә: беҙгә уның һөйләгәндәре,  әйткән һүҙҙәре,  фатихалары һаман да ҡолаҡта сыңлап, матур йәшәргә көс- дәрт биреп тора. Минең ҡартатайҙарым, олатайҙарым, ағайҙарым ошо изге бурысты намыҫ менән үтәне.

Эйе, быйыл беҙ Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын ҡаршылайбыҙ. Был Еңеүҙә минең ҡартатайымдарҙың, олатайымдарҙың, өләсәйемдәрҙең, ҡартәсәйемдәрҙең, инәйемдәрҙең өлөшө ҙур. 9 Май көнө атайым менән “Үлемһеҙ полк” ка сығасаҡбыҙ. Еңеү менән ҡайтып, вафат булған Хажеғәле ҡартатайым, Фәтих олатайым беҙҙең менән бергә “Үлемһеҙ полк” та атлар.

Динар Мөхәмәтйәнов
3 класс уҡыусыһы